ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫНЫҢ «18-СЕ БАШҠОРТ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ»
МУНИЦИАЛЬ АВТОНОМИЯЛЫ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

# Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге“Өләсәйҙә ҡунаҡта”

- ӨФӨ -

Маҡсат: балаларҙың тыуған яҡ тураһындағы белемдәрен тәрәнәйтеү, башҡорт ҡыҙҙарының милли кейеме, милли аштарҙы танып-белеүҙе, тыуған ергә мөхәббәт хистәре тәрбиәләү, хәтерҙе нығытыу.

Һүҙлек: ҡош теле, бишбармаҡ, асыҡ ауыҙ, бауырһаҡ.

Йыһазландырыу: өй макеты, ҡыңғыраулы дуға, таҫтамалдар, ашъяулыҡ, башҡорт халҡының милли аштары, Дид. Уйын "Балаҫ төҙө", милли кейемдә ҡурсаҡ, музыка.

Дәрес барышы:

Ҡулына хат тотоп милли кейемдә инәй килеп инә.

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин һеҙгә бик йыраҡ ауылдан килдем. Ейнемдән хат алғайным, тыңлағыҙ әле, бына нимә тип яҙа ул.

"Ҡәҙерле өләсәй! Беҙ ҙур, матур ҡалала йәшәйбеҙ, ләкин минең ауылды бик күргем килә. Һине лә һағындым."

Бына ошо хат буйынса килдем, дөрөҫ килдемме икән?

- Балалар, һеҙ ниндәй республикала йәшәйһегеҙ?
- Ә һеҙ йәшәгән ҡала нисек атала?
- Ә һеҙҙең балалар баҡсаһы ниндәй урамда урынлашҡан?
- Тимәк, был Затон биҫтәһенең 18-се балалар баҡсаһының башҡорт төркөмө буламы? Дөрөҫ килгәнмен икән.
- Өфөгә килгәндә күперҙе үткәс, ниндәй һәйкәл тора? Кем ул Салауат Юлаев?
- Эйе, балалар, Салауат Юлаев башҡорт халҡының азатлығы өсөн көрәшкән, барлыҡ халыҡтарҙы дуҫ булырға өндәгән. Шуға күрә Салауат Юлаевты бөгөн дә хөрмәт итәләр.
- Өфө ҡалаһы бик матур, ҙур ҡала икән. Юҡҡа ғына уны маҡтап шиғырҙар, йырҙар яҙмайҙар икән. Һеҙ Башҡортостан, Өфө тураһында ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ? (Б-р шиғыр һөйләй)

Өләсәй: Күренекле башҡорт шағиры Рәшит Ниғмәти былай тип яҙған:

Ерем минең, аунап үҫкән ерем
Ниндәй матур, ниндәй яҡын һин.
Һин булғанда, алтын кәрәк түгел
Һин бит үҙең, үҙең алтын һин.

- Балалар, тыуған ер тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ?
- Ә һеҙҙең ауылға барғығыҙ киләме?
- Әйҙәгеҙ, улйһа ауылға ҡунаҡҡа. Беҙ бараһы ауылға автобус та, поезд да йөрөмәй. Юлға бик күп ҡар яуған. Шуға күрә ат менән барабыҙ.
- Ана беҙҙең ауыл күренә башланы, ана минең өйҙөң түбәһе күренә. Килеп еттек, балалар! Түрҙән уҙығыҙ. Ултырығыҙ. (Өйҙән башҡорт кейемендә ҡыҙ сыға)

- Бына минең ҡыҙым да һеҙҙе ҡаршы алырға сыҡҡан. Башҡорт халҡы борон-болрондан ҡунаҡтар килһә, матур кейемдәрен кейеп ҡунаҡты ҡаршы алған.
- Ҡарағыҙ әле, минең ҡыҙым нисек матур кейенгән.
- Ә нимә кейгән ул?
- Ҡыҙым, ҡунаҡтарға әллә бүләк итеп бер бйеп алаһыңмы?

(Бейеү)

- Балалар, әйҙәгеҙ уйнап алайыҡ.

Уйын “Тирмәкәй”

- Балалар, минең өйөмдә бик ҡәҙерләп һаҡлаған әйберҙәрем бар. Бына улар. Ем белә,ю был нимә? (ашъяулыҡ, балаҫ..)
- Биҙәктәрен ҡарайыҡ әле.
- Ә быныһы тылсымлы ашъяулыҡ. Тыңлағыҙ әле, ул нимәлер һөйләй (магнитофон таҫмаһында)
- Теләгәндәр тыңлһа,
  Серемде әйтәм һеҙгә.
  Бөгөн беҙҙә нимә бешә?
  Ҡыҙған майға нимә төшә?
- Балалар, әгәр тылсымлы һүҙҙәр әйтһәгеҙ, был ашъяулыҡҡнта ашамлыҡтар барлыҡҡа килер...
- 1,2,3 – тиҙ генә күҙеңде ас.
- Бына, балалар, ниндәй милли аштар күрәһегеҙ?
- Бик һәйбәт беләһегеҙ икән. Ә хәҙер мин һеҙҙең иғтибарлыҡты ҡарайым. Уйнап алайыҡ. “Нимә юғалды?”
- Тирмәгә инер алдынан әйҙәгеҙ матур балаҫ һуғайыҡ.
  Диактик уйын “Балаҫ төҙө”.

  - Бик матур булды балаҫтарыбыҙ.
  - Тирмәгә рәхим итегеҙ.
  - Сәйҙәрегеҙ тәмле булһын!